

# БАШ МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

I Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы резолюцияһы буйынса Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан «Ватандаш» ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис журналы булдырылыуға алты йыл ваҡыт үтеп тә китте.

II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан беҙ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың, Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының даими хәстәрлеге һәм күп һанлы авторҙарыбыҙҙың ярҙамы менән редакция коллективы Рәсәй Федерацияһының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәре менән бәйләнеште нығытыу буйынса үҙенә йөкмәтелгән юғары бурысты уңышлы үтәп килә, тип ышаныслы рәүештә әйтә алабыҙ. Беҙ бөтә донъяға таралған яҡташтарыбыҙҙы Башҡортостан Республикаһының үҫеше, Силәбе, Пермь, Ҡурған, Ырымбур, Һарытау, Һамар, Свердловск өлкәләрендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында, шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа бик күп төбәктәрендә, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙә йәшәгән башҡорттарҙың тормошо менән таныштырабыҙ. Рухи һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе нығытыуға булышлыҡ иткән был эште киләсәктә лә даими дауам итәсәкбеҙ.

Журналдың был һанын беҙ II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына арнайбыҙ һәм бөтә делегаттарға һәм ҡатнашыусыларға ныҡлы һаулыҡ, был йыйында уңышлы һәм емешле эш, ватандаштарыбыҙға гүзәл Башҡортостан ерендә шатлыҡлы осрашыуҙар теләйбеҙ.

Фәрит ӘХМӘҘИЕВ,
журналдың баш мөхәррире,
II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына
Өфө ҡалаһы Совет районынан делегат.



05.2002 Part 1.p65 4 06.06.02, 17:10